**Йыһат Солтанов**

# Һарттар

***1***

1956 йылда Өфөлә донъя күргән “Очерки по истории Башкирии” тигән китаптың I томы, I кисәгенең 41-се битендә билдәле этнограф Р.Ғ. Кузеев тарафынан беренсе тапҡыр рәсми телгә алынып, 1971 йылда “Ағизел” журналының февраль һанында тексы ташҡа баҫылып сыҡҡан “Һуңғы һартай” исемле тарихи хикәйәтебеҙ зыялы барса уҡыусыларын таң ҡалдырып тетрәндерткәйне һәм башҡорттоң күп ырыуҙары араһындағы Һарт ырыуына төбәлеберәк ҡарарға, уның килеп сығышы һәм тарихы менән ныҡыраҡ ҡыҙыҡһынырға мәжбүр иткәйне. Үҙебеҙ һымаҡ уҡ аҫаба башҡорт һарттарҙың да борон-борондан уҡ арабыҙҙа йәшәп килеүҙәрен күптәребеҙ күреп тә, ишетеп тә белһәк тә, был ырыуҙың иң боронғо тарихы һәм тамырҙары ошоғаса йүнләп тикшерелмәүе асыҡланды. Ысынлап та, кем һуң улар, һарттар?

Һәр нәмәгә маһир “Большая Советская Энциклопедия” һарттарҙы “үзбәктәрҙең ҡәҙимге ултыраҡ тормошло өлөшө” тип атай ҙа ул, атауын. *Ләкин* был *үзбәктәр* үҙҙәре кем икән һуң?..

Хәҙерге үзбәк ғалимы Б.Х. Ҡармышева “Үзбәк СССР-ы Ҡашҡадәрья өлкәһенең төньяҡ-көнсығыш өлөшө халҡының этник һәм ерлек төркөмдәре” тигән бер мәҡәләһендә (“Этнография институты, ҡыҫҡа хәбәрҙәр”, XXXIII, М., 1960, 47-се бит; артабан: Б.Х. Ҡармышева) “үзбәк халҡының барлыҡ өс тарихи ҡатламын” ошолай билдәләй: “1) ҡәҙимге ултыраҡ тормошло ерекмән һәм ҡала халҡы (ырыу-ҡәбилә бүленеше юҡ); 2) төрки-монгол ҡәбиләләр тоҡомдары, яҙма сығанаҡтарҙа һәм хәҙерге ерле халыҡ телендә улар *төрк, төркләр* тип йөрөтөлә (ырыу-ҡәбилә атамаларын өлөшсә һаҡлағандар); 3) XV быуат аҙағы — XVI быуат башында Шәйбәни-хан етәкселегендә Урта Азияны яулап алған Дәшт-и-ҡыпсаҡ (Алтын Урҙа) *үзбәктәренең* күп һанлы ҡәбиләләренең тоҡомдары”. Һуңғы күп һанлы төркөм, *үзбәктәр,* күренеп тора, Урта Азияға тап беҙҙең яҡтан ябырылмыш беҙҙең ғәзиз бабалар. Шуға тиклем Урта Азияла *“үзбәк”* тигән этнос булмаған, *үзбәк* унда төньяҡтан — Күк Урал (Күк Урҙа) яғынан килгән.

Икенсе бер үзбәк ғалимы Б.А. Ахмедов 1965 й. Мәскәүҙә сыҡҡан “Күскенсе үзбәктәр дәүләте” тигән китабында (артабан: Б.А. Ахмедов) был дәүләт тарихын ентекле генә тикшереп, “XV быуаттарҙың 20-се йылдарында Дәшт-и-ҡыпсаҡтың көнсығыш өлөшөндә” (йәғни Күк Уралда!) уның барлыҡҡа килеүенең сәбәбе итеп “Алтын Урҙаның тарҡалыуын һәм Алтын Урҙала ла, Аҡһаҡ Тимер нәҫелдәре империяһында ла феодалдарҙың үҙ-ара һуғыштарының көсәйеүен” билдәләй. Был дәүләт, ти ул, “40 йылдан аҙ ғына ашыуыраҡ йәшәне, әммә Урта Азия һәм Ҡаҙағстан халыҡтарының артабанғы яҙмыштарын билдәләүҙә күренекле урын тотто. Был дәүләтте Әбү-л-Хәйри-хан — Аҡһаҡ Тимер нәҫелдәре империяһын яулап алыусы Мөхәммәт Шәйбәни-хандың ҡартатаһы нигеҙләгәйне” (5-се бит).

Билдәле булыуынса, Дәшт-и-ҡыпсаҡтың шул Мөхәммәт Шәйбәни-хан тарафынан дөйөм дәүләткә тупланмыш ҡәбиләләр һәм халайыҡтар уҡмашы хәҙерге байтаҡ төрки халыҡтарының — башҡорттарҙың, үзбәктәрҙең,

ҡаҙаҡтарҙың, ҡырғыҙҙарҙың, ҡарағалпаҡтарҙың һ.б. туп-тура бабаларынан хасил булған. Ул Шәйбәни-хан ылыҫының сиктәрен теүәл генә билдәләүе мөмкин түгел хәҙергә. Әммә Әбү-л-Ғази мәғлүмәттәренә ҡарағанда, — ти Б.А. Ахмедов (41-се бит), — Шәйбәни-хан йәйҙәрен — Урал тауы итәктәренән алып Тубыл, Яйыҡ, Илек, Ырғыҙ йылғаларынаса йәйрәмеш киң арауыҡта, ә ҡыштарын Арал диңгеҙе бассейнындағы Чуйсу, Сарысу йылғалары буйында һәм Сырдаръяның түбәнге яҡтарында күсенеп йөрөгән"; былар иһә башҡорттоң борон-боронданғы уҡ донъяға киң билдәле аҫаба ерҙәре һәм *йәйләү — ҡышлау* әйләнешенең урындары булып, башҡорт халҡының хәтерендә әлегәсә ныҡ һаҡлана (Р.Ғ. Кузеев. Происхождение башкирского народа. М., 1974, 198-199-сы биттәр; артабан: Р.Ғ. Кузеев). Һәм хәҙерге башҡорт әйиеләре (уларға *һарттар* ҙа керә), ти ғалим, мәҫәлән, "Сырдаръя һәм Арал буйҙарында ғәрәп-фарсы сығанаҡтары "бажғард" (башҡорт) тип, ә һуңғыраҡ дәүер Урта Азия яҙыусылары Насир-әд-дин Ар-рабғузи, Әбү-л-Ғази кеүектәр "иштәк" (шул уҡ башҡорт) тип атаған ҡәбиләләр төркөмөндә бергә тығыҙ аралашып йәшәгән. Бажғардтар һәм буржандар (башҡорттар һәм бөрйәндәр) көнбайышҡараҡ киткәс, әйиеләрҙең, шул иҫәптән *һарттарҙың* бабалары бер ни тиклем ваҡыт Сырдаръя һәм Арал буйҙарында ҡала. Улар, моғайын, шул саҡта уҡ баяғы унда үҙләштерелмеш *йәйләү — ҡышлау* әйләнешенә ылыҡҡан: ҡышын малдар Сырдаръя һәм Арал буйҙарындағы йоҡа ҡарлы далаларҙа көтөлгән, ә йәйгеһен алыҫ төньяҡҡа — Торғаяҡ, Тубыл, Уй буйҙарына һәм тамам Урал итәгенәсә ҡыуылған. Дәшт-и-ҡыпсаҡта сәйәси хәлдәр ҡатмарлашҡас, әйиеләрҙең бер өлөшө (шул иҫәптән *һарттар.* — Й.С.) үҙҙәренә билдәле күсенеү юлдары буйлап Көньяҡ Уралға ҡайтҡан һәм был уларҙың даими төйәге булған" (Р.Ғ. Кузеев, 205-206-сы биттәр). Шуның менән бергә, үзбәк ғалимы Б.А. Ахмедов бик хаҡлы билдәләүенсә (16-сы бит), "Дәшт-и-ҡыпсаҡ күсмә ҡәбиләләр берлеген тәшкил итмеш күп ҡәбиләләрҙең һуңынан ваҡланып бүленеүҙәре һәм уларҙың төрлө өлөштәренең, шулай ҙа *үҙҙәренең ҡәбилә атамаларын һаҡлап ҡалып,* ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ һ.б. халыҡтар даирәһенә кереүҙәре яҡшы мәғлүм", был иһә ул әйтелгән халыҡтарҙың барыһында ла улар өсөн уртаҡ теге йәки был ҡәбилә атамаларының, айырым алғанда, *һарт* атамаһының, булыуы менән раҫлана. Был иһә барыһынан элек өс ҡәрҙәш халыҡҡа ҡайтып ҡала: башҡорттарға, ҡаҙаҡтарға һәм үзбәктәргә; һуңғыларын (хәҙерге үзбәктәрҙе), билдәле булыуынса, башҡорттар нәҡ XX быуат башынаса *һарт//сарт* ләҡәбендә белгәндәр ҙә атағандар, ә башҡорттарҙың үҙҙәрен дә Урта Азияның ҡайһы бер халыҡтары, мәҫәлән, ҡаҙаҡтар, "иштәк" тип, ә үзбәктәр "нуғай" тип йөрөткәндәр. Башҡорт халҡының бер килке өлөшөн һарттар ҙа тәшкил иткәнлеге Башҡортостандың ер-һыу атамаларында ла ярылып ята: Һарт, Һарт-батраҡ, Һарт-Симирнәү, Һарт-шишмә, Һарт-баш, Һарт-Лобау, Һарт-Науруз һ.б. (Р.Ғ. Кузеев, 206-сы бит). Шуны ла әйтергә кәрәк, башҡорт теленең көнсығыш һәм көньяҡ диалекттарында һөйләшкән һарттар үҙ ырыу атамаһын *"һарт"* тип *"һ"*-лаштырып һөйләһә, төньяҡ-көнбайыш диалектында һөйләшеүселәре, борондағы *"с"* күренешен һаҡлап, *"сарт"* тип әйтә, был да башҡортлоҡ билдәһе. Сөнки фәндә яҡшы мәғлүм булыуынса, "башҡорт әҙәби теленең үҙенсәлектәренең береһе шунан ғибәрәт: бер юлы ул ике — ҡыуаҡан һәм юрматы

диалекттарына нигеҙләнеп, өсөнсө — төньяҡ-көнбайыш диалекттың да ҡайһы бер мөлкәттәрен файҙалана" (М.И. Исаев. О языках народов СССР. М., 1978, 128-се бит). Шуныһын да аныҡлап китеү урынлы: әйтелгән өсөнсө диалект — төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының теле — тәүге ике диалект кеүек үк, "донъя яратылғандан уҡ" йәшәп килмеш аҫаба-башҡорт теленең бер өлөшө булып тора һәм ул да беҙҙе, башҡорт теленең күренеше булараҡ, донъяның ғөмүмән башҡа төрки телдәре менән бергә, бөтә телдәр өсөн дөйөм *тәүтел* олонона илтеп тоташтыра. Тик ошоно, үкенескә ҡаршы, телсе ғалимдарыбыҙ ғына әлегәсә иғтибарһыҙ ҡалдырҙылар һәм, М.И. Исаев хаҡлы билдәләүенсә, уның фәҡәт "ҡайһы бер мөлкәттәрен" генә әҙәби тел өсөн "файҙаландылар". Ләкин бында мин, "һарт мәсьәләһе"н асыҡлауҙа алдынғы тел белеменең тәүтелде тергеҙеү алымдарына мөрәжәғәт иткәнемдә, башҡорт теленең бөтә мөмкинлектәрен дә ҡулланыу кәрәк булғанлыҡтан, тәүге ике — көнсығыш һәм көньяҡ (М.И. Исаевса — ҡыуаҡан һәм юрматы) диалекттарҙың боронғо *"с"* урынына *"һ" (һарт)* әйтелешен дә, өсөнсө — төньяҡ-көнбайыш диалекттың *"һ"* урынына *"с" (сарт)* әйтелешен дә бер тигеҙ һәм сикләүһеҙ, киҫәтеүһеҙ файҙаланам. Йәнә килеп ошо урында башҡортлоҡто белдереүсе *"аҫаба"* терминының әүәлерәк *"асабаҡ"* рәүешле әйтелеүен дә иҫәпкә алып ҡуяйыҡ.

Ә башҡорттар *сарт* тип йөрөтмөш Урта Азия төрки халҡының "үзбәк" атамаһы ҡайҙан килеп сыҡҡан һуң?

XVI быуат башында баяғы Шәйбәни-хан етәкселегендә Күк Уралдан ҡубынмыш "Дәшт-и-ҡыпсаҡ ҡәбиләләре", йәғни нигеҙҙә *башҡорт-асабаҡтар,* борондағы үҙ ерҙәренең бер киҫәге һаналған Урта Азияны ҡабаттан биләп алып, хәҙерге Үзбәкстан тупрағында төпләнеүен һәм "урындағы ҡәҙимге төрки тоҡомдар" менән аралашыуын өҫтәрәк үзбәк ғалимдары хеҙмәттәренән белгәйнек. Шуға тиклеп ул яҡтарҙа *"асабаҡ"* та, *"үзбәк"* тә бер кемдең дә атамаһы булып йөрөмәгән, тигәйнек. Фәҡәт шул *"асабаҡ"* (йәғни *аҫаба,* ер биләүсе үҙ аллы башҡорт) тоҡомдары унда барғас һәм дәүләт төҙөгәс кенә, был атама, Б.А. Ахмедов үҙе лә таныуынса (16-сы бит), этноним мәғәнәһен алып, шул тупраҡтың төрки телле бөтә халҡына *үзбәк*[1] ләҡәбе берегә... Б.Х. Ҡармышеваның (48-49-сы биттәр) ҡыҙыҡлы күҙәтеүе бар: "Үзбәкстандың һәм Тажикстандың көнбайыш һәм көньяҡ өлкәләрендә *үзбәк* атамаһы ерле халыҡ тарафынан һаман башлыса Дәшт-и-ҡыпсаҡ *үзбәктәре* (асабаҡтары, аҫабалары. — *Й.С.*) тоҡомдарына ҡарата ҡулланыла, йәғни ул термин үҙенең урта быуаттар аҙағындағы тар мәғәнәһендә йөрөй. Хәҙерге ваҡытта, *үзбәк* этнонимы үзбәк социалистик милләтенең дөйөм ләҡәбенә әйләнгәс, беҙ йөрөгән райондарҙағы ерле халыҡ йыш ҡына уны ике вариантта телгә ала ине: *үзбәк* һәм *узбаҡ. Үзбәк* ләҡәбе ҡала үзбәктәрен билдәләү, шулай уҡ киң мәғәнәһендә үзбәк милләте рәүешендә ҡулланылһа, ә *узбаҡ* — тар мәғәнәһендәге Дәшт-и-ҡыпсаҡ үзбәктәре атамаһы булып ҡалған". Был ике терминдың да бер һүҙҙән — "асабаҡ"тан ("аҫаба"нан) килеп сығыуы үтәнән-үтә күренеп тора (күрә белгән кешегә), ләкин иң элек уларҙың икенсеһе — *узбаҡ* үҙенең "асабаҡ"ҡа яҡынлығы менән иғтибарҙы ныҕыраҡ йәлеп итә. Һәм, ғөмүмән, ғалимдар тарафынан аныҡ фашланғанмы икән был термин?

---

[1] Үзбәк — *"асабаҡ"* терминының *азабаҡ — озбаҡ — үзбәк* рәүешле үҙгәреше.

Бер килке белгестәрҙең (Н.А. Аристов, А.Ю. Якубовский, П.П. Иванов, М.А. Чапличка, Хильда Хуукан) фекере буйынса, Алтын Урҙа тәхетендәге Үзбәк-хандың (1312-1340) исеме, имеш, уның дәүләте халҡының этнонимы *үзбәк* булып әүерелгән, — йәнәһе лә, имеш, шундай уҡ Нуғай-хандан *нуғай* халҡының исеме яһалғандай. Әммә тарихта улар әйткәндең киреһе булғанлығын — *халыҡ-ырыу атамаһының хан ләҡәбе булып әүерелгәнлеген (ә киреһенсә түгел!)* абруйлы авторҙар ниңәлер онотоп ташлай. Әгәр уларса булһа, "башҡорт" этнонимы — X быуатта йәшәгән атаҡлы Башҡорт-хан исеменән, ә "урыҫ" этнонимы — XIV быуаттағы урыҫ түгел Урыҫ-хан исеменән хасил, тип ауыҙ тултырып раҫлап, оятҡа ҡалыр инек, сөнки был этнонимдарҙың был хандарҙан күп быуаттар элгәре үк булғанлығы бөтә донъяға мәғлүм (әйткәндәй, заманында Сағатай-хан ылыҫы халҡын "Сағатайлылар" тип йөрөтһәләр ҙә, ул барыбер этнонимға әүерелмәй онотола). Ошо арҡалалыр инде, "үзбәк" этнонимын Үзбәк-хан исеменә бәйләү фаразы үҙ ваҡытында уҡ шик аҫтына алынып, билдәле шәреҡсе В.В. Григорьев тарафынан ныҡ ҡына ҡаҡшатыла, фараздың нигеҙһеҙ икәнлеген А.А. Семенов *дәлилләй* (Б.А. Ахмедов, 11-12-се биттәр), бының менән башҡа байтаҡ ғалимдар, шул иҫәптән Б.А. Ахмедов үҙе *лә*, һүҙһеҙ килешә, буғай. Әммә мәсьәлә әлегәсә асыҡ тороп ҡалғанлыҡтан, был юлдарҙың авторы *ла* үҙ фекерен әйтеп китергә мәжбүр. Эш шунда: телгә алынмыш "нуғай" ҙа, "асабаҡ" ("үзбәк") тә асылдарында ҡарыһүҙи бүре-эт йәки әсә-бәһәрә (әсә-бүре) хоҙайға табыныусы һәм үҙҙәрен шуға бәйле "әсәбүрекөн"дәр (үҫәргәндәр) йәки "бүрет"тәр (бүрәттәр) тип тә *ләҡәпләүсе* башҡорт-үҫәргән тоҡомдары бит улар. "Әсә-бәһәрә"нең ҡыҫҡартылып әйтелеше "әсә-бәһә" — *асабаҡа (собака)* тигән кәнтәй-эт мәғәнәһен биргәндәй, уға табыныусы *асабаҡ* (аҫаба) — *"үзбәк"* этнонимын да килтереп сығарған; үҙ еренә үҙе хужа (үҙ аллы) булған башҡорт тоҡомо әлегәсә *аҫаба* тип атала. Татар-монголдар иһә шуны монгол теленә тәржемәләп, башҡорт-үҫәргән халҡын тағы, "үзбәк" менән бер ҡатарҙан, *"нуғай"* (монголса "эт") йәғни эткә табыныусылар, тип исемләгәндәр; былар икеһе лә аҙаҡ этнонимдарға әйләнеп, үҙ ваҡыттарында баяғы ике хандың ләҡәптәре лә булып йөрөгән...

Башҡорт "асабаҡ"ының "үзбәк"кә әйләнешен ғалимдароҙан Г. Вамбери, Г. Хворос, М.П. Пеллио, тикшеренеүҙәрендә "башҡорт" һүҙен килтереп ҡыҫтырмаһалар ҙа, яҡшы уҡ тоҫмаллаған. Улар фекеренсә, ти Б.А. Ахмедов (12-се бит), "Дәшт-и-ҡыпсаҡтың төрки-монгол ҡәбиләләре үҙҙәренең "ирекле" булыуҙары сәбәпле "үзбәк" ("үз" — үҙем, "бәк" — хужа) ләҡәбен алғандар", ә был иһә, ҡыялатыбыраҡ булһа ла, минеңсә, туп-тура башҡорт "аҫаба"лығын ("үзбәк"леген) сағылдыра. Автор шунда уҡ Г. Вамбериҙың ҡиммәтле аңлатмаһын бирә: *"үзбәк* һүҙенең тулы мәғәнәһе — *үҙемә үҙем хужа, үҙ аллы*. Шуныһы ҡыҙыҡлы, — ти ғалим, — был һүҙ боронғо венгрҙарҙа ла осрай һәм *кешенең абруйы йәки дәрәжәһе* рәүешендә 1150 йылғы рәсми ҡағыҙға ла яҙылған". Шул "асабаҡ" ("үзбәк") дәрәжәһенә эйә булған боронғо венгрҙарҙың да, һәм шулай уҡ Дәшт-и-ҡыпсаҡтың Шәйбәни-хан аҫабаларының да уртаҡ тәүтөйәге Күк Урал — хәҙерге Башҡортостан икәнлеген хәтерләһәк, иғтибарыбыҙ үҙенән-үҙе ундағы бөгөнгө башҡорт теленә ҡайта: *"аҫаба* — нәҫелдән күсә килгән ерҙең хужаһы" (Башҡорт теленең һүҙлеге, I том, м., 1993, 85-се бит) һәм: *"аҫаба* — 1. Аймаҡ

башлығы — старейшина родового подразделения. 2. *Асаба* — баҫыу — поле, Нива" (Словарь башкирских говоров, т. II, Уфа, 1970, 32-се бит). Күренеүенсә, "асабаҡ"тың ("үзбәк"тең) бөгөнгө башҡорт телендәге мәғәнәһе тулыһынса Г. Вамбери тоҫмалына тап килә.

"Үзбәк"тең "асабаҡ"тан — аҫаба-башҡорттарҙан хасиллығына инанғас, бөгөнгө башҡорт милләтен дә, бөгөнгө үзбәк милләтен дә урталыҡта тоташтырып-бәйләп торған, тимәк, бер юлы үҙе үзбәк тә, башҡорт та булған *һарт* этнонимын ҡайҙа ҡуябыҙ?.. Б.э. тиклем VII быуаттан да элегерәк Күк Уралдан — Башҡортостандан алыҫта, хәҙерге Төркиәнең көнбайышында Ағай (Эгей) диңгеҙенә терәлеп үк йәшәгән һәм йәнә килеп Апеннин ярымутрауына (хәҙерге Италияға) ла барып етеп һоҡландырғкыс тормош ҡорған *һарттар* ҙа һәм улар өлөшө *этрусктар* ҙа шулай уҡ бөгөнгө *һарт-башҡорттарҙың* бабалары булғанмы? Һәм, ғөмүмән, ҡитғаның шул тиклем дә алыҫ мөйөштәренә башҡорттарҙың барып етеүе мөмкинме? Быңдай "сәйер" һорауҙарға дөрөҫ яуап бирер өсөн боронғонан ҡалған матди ҡомартҡылар, бигерәк тә иҫке яҙмалар, ҡарыһүҙ-дин, тел хазиналары хеҙмәт итә. Башҡорттарҙың ысынлап та шул тарафтарға, хатта, унан да уҙып китеп, боронғо Египетҡа уҡ барып етеүҙәрен хикәйәтләгән һәм мәғлүмәттәре грекстың атаҡлы Геродот тарихы менән дә дөрөҫләнгән боронғо башҡорт шәжәрәһе "Оғузнамә"нең хаҡлығын раҫлаусы рәсми дәлилдәр араһынан аңыбыҙҙа әлегәсә өлөшләтә йәшәп килмеш тәүдинебеҙҙең боронғо Египет диненә кермеш уртаҡ сәхифәләренә ҡыҫҡаса ғына мөрәжәғәт ҡылайыҡ.

## 2

Башҡорттоң тәүдин ҡарыһүҙендә "әсәре-көн"дән (шәре//ер һыуы-көндән) — башҡорт халҡының әсә (ҡыҙ) яҡ яртыһы тәүырыуының башбабаһы сәре-көн йәки шәргөн//Шүлгән йәки Саргон тыуыуын һәм ул бер ыңғай шул уҡ Әсәрегөн//Үҫәргән исемендәге әсә яҡ тәүырыуҙың башбабаһы ла, Көн дә (Ҡояш та) булып китеүен; һәм шулай уҡ "абзый-ар"ҙың (боҙ-Ай-ерҙең//ер боҙо-Айҙың) алы (улы) булып башҡорт халҡының ата яҡ яртыһы тәүырыуының башбабаһы абыз-Ай-ар-ал йәки абзый-Урал (абзый-Ер улы) тыуыуын һәм ул бер ыңғай шул уҡ абызаҡ-ар-ат йәки *боҙкарат//башҡорт* атамаһындағы ата яҡ тәүырыуҙың башбабаһы ла, Ай ҙа булып гиҙеүен; Шүлгән-башбабаны — миһырбанлы Әсә-Бүре, ә Урал-башбабаны миһырбанлы Һыйыр-Инә имеҙеп үҫтереүҙәрен, шуға күрә лә әҙәми һынлы был игеҙәк башбабаның береһе, "Әсә һөтө ебәрмәгән"лектән, — бүре (арыҫлан) ҡиәфәтле (Шүлгән йәки Гильгамеш), ә икенсеһе, "Инә ыуыҙы ебәрмәгән"лектән, һыйыр (инә) ҡиәфәтле (Урал йәки Энкиду) булып үҫеүҙәрен "Хәтерхитап"та ентеклерәк бәйән иткәйнем инде. Ипләберәк ҡарағанда, Шүлгән менән Уралды бит бер-береһенән уларҙы яралтмыш бер үк һыуҙың ике физик әхүәле — йомшаҡ (иреү) һыу (Шүлгәндең әсәлек енес күрһәткесе) һәм ҡаты боҙ (Уралдың аталыҡ енес күрһәткесе) — генә айыра, шуға күрә лә уларҙың береһе — ҡайнар Көн (Шүлгән), икенсеһе һалҡын Ай (Урал) булып донъяла гиҙә; был иһә барлыҡ Донъя-Ғаләм-Тереклектең ғәмәлдә ике есемдән — **һыу** һәм **уттан** хасиллығының билдәһе. Асылда был

икешәрлек (дуализм), тәүдинебеҙҙән башланып, бөтә диндәрҙең дә нигеҙенә һалынған; иң боронғо диндәрҙе тотоусылар ғәмәлдә ошо икәүгә — **һыу** һәм **утҡа** табынған. Әҙәм балаһы, моғайын, иғтибарын үҙенә иң яҡын һәм кәрәкле нәмә һыуға — әсә (инә) һөтөнә (ыуыҙына) һәм ер йөҙөндә шылтырап ағып ятмыш әсәкәйгә (эсәкәйгә) — шул уҡ һыуға йүнәлткән дә **боҙ-һыу** сығанағы тип һаналмыш **Ай-Уралды** данлаған:

**Ай-Уралым**, Уралым,
Ҡуш имсәктәй ҡабарып,
Ҡалҡып торған Уралым;
Бөтә данды үҙенә
Тартып торған Уралым...
Атам кейәү булған ер,
Әсәм килен булған ер,
Кендегемде киҫкән ер,
Тәмле һыуын эскән ер!
***Ай-Уралым**, Уралым,*
*Барына ата Уралым,*
***Ай-Уралым**, Уралым,*
*Барына инә Уралым.*
**“Ай-Уралым, Уралым”.**

Бында ***“Ай”*** менән ***“Урал”*** араһына тоташтырғыс һыҙыҡсаны мин ҡуйҙым, сөнки эпос ижад ителгән бик боронғо заманаларҙа ул тап ана шул ***Ай-Урал*** (Месяц-Урал) мәғәнәһендә йөрөгән, быны текст эсендәге күп кенә мәғлүмәттәр, шул иҫәптән Ай-Уралдың “ата” енесле булыуы ла, уны имеҙеүсенең, үҫәргәндәрҙекенә хас “әсә” (бүре) түгел, ә башҡорттарҙыҡына хас “инә” (һыйыр) икәнлеге лә дөрөҫләй. Һәм, иғтибар иткәнһегеҙҙер, эпостарҙа ла, йырҙарҙа ла “Ай” есеме “Урал”ға теркәлеп йөрөй...

Фараз ҡылыуыбыҙҙы дауамлаһаҡ, әҙәм балаһы, ниһәйәт, Күктән тирткән йылылыҡ һәм яҡтылыҡҡа албырғанып башын ҡалҡыта һәм ундағы шәре-һыуҙа (Күктә) йөҙөп барыусы икенсе тормош сығанағын — **Көндө (утты)** күреп иҫе китеп табына. Һөҙөмтәлә сәре//шәре//һары Көндән (уттан) яралмыш ҡатын-ҡыҙ һәм боҙ//буҙ аҡтан (Айҙан) яралмыш ир-ат заттары барса тормош-тереклекте башлап ебәреүҙәре аңлашыла. Шуны ла әйтергә кәрәк, Көн һәм Айҙың әлеге енес күрһәткестәре ҡарыһүҙи Урта Донъяла — Евразия ҡитғаһында шул көйөнсә һынланып, ә Өҫкө Донъяла (Африка ҡитғаһында) һәм Аҫҡы Донъяла (Америка ҡитғаһында) был күрһәткестәр тиҫкәре яҡҡа үҙгәрә: һары Көн — ир-ат, ә буҙ-Ай — ҡатын-ҡыҙ енесле булып йөрөй. Башҡорт халҡы борон-борондан уҡ Ер шарының барлыҡ ҡитғаларын гиҙеп үткәнлектән (Балхаш күле буйындағы Хантау ҡаяларына бабаларыбыҙ һыҙып ҡалдырған ғәжәп теүәл мәғлүмәтле Донъя атласы — географик карталар быға шаһит!) һәм ауыҙ-тел ижадтарыбыҙ ҙа төрлө ҡитғаларҙа йәшәп китеүебеҙҙең емеше булғанлыҡтан, башҡорт ҡарыһүҙҙәренә һәм эпостарына бер юлы ана шул ике енеслелек хас (мәҫәлән, Айыбыҙ — Айһылыу-ҡыҙ ҙа, Айегет тә булып йөрөй), быға аптырап ҡалырға һис ярамай. Шул уҡ ваҡытта төп нәмәләр барыһында ла бер үк.

Боронғо Египет динендә лә баяғы дуализм — ике ҡапма-ҡаршылыҡтың берәгәйлеге сағыла: *һыу-Ай* һәм *ут-Көн* ҡауышыуҙан хасил *тормош-тереклек.* Хатта Донъя-Ғаләм-Тереклекте хасил ҡылмыш Хоҙай (ут тип алайыҡ) үҙе һыу хаосынан — Нун исемле тәүге оҡеандан ҡарпып килеп сыға; һәм уның ҡөҙрәтле ҡулы аҫтында шундай ҡапма-ҡаршылыҡлы ғаләми матдәләр берләшә: һыу (Нун) һәм Көн (Атум, Ра һ.б.), ер (Геб) һәм күк (Нут), ҡараңғылыҡ (ҡуҡ) һәм яҡтылыҡ (ҡауҡет) — барыһы ла башҡорттоң тәүдинендәгеләй һәм унан үркәнләнмеш Сураштора (Заратуштра) динендәгеләй. Боронғо грек натурфилософы Фалес (б.э, тиклем VII-VI быуаттар) фекеренә ҡағылышлы Плутархтың әйтеүенсә, үҙ тәғлимәттәрен ул ғалим египетлыларҙан алған һәм ул да донъялағы барлыҡ нәмәнең дә башланғысы *һыу* тип һанаған (М.А. Коростовцев. Религия древнего Египета. М., 1976, 101-се бит; артабан: М.А. Коростовцев). Боронғо египетлыларҙың ҡарыһүҙенсә, кешеләрҙең яралыуы *ла* һыуға — Көн хоҙайы Раның күҙ йәштәренә бәйле (М.А. Коростовцев, 100-сө бит), йәғни ер йөҙөндәге Тереклек *һыу* һәм *уттың* Ра хоҙайға әүерелмеш берәгәйлегенән килә, ә был иһә ер йөҙөндәге беҙгә билдәле иң боронғо бер халыҡтың аталышын (этнонимын) тәшкил итеүсе *убусуҡурут — бусуҡурут — **башҡорт*** терминында асыҡ сағыла. Сөнки ошо тәүтермин *убусуҡурут — абасаҡарат (башҡорт),* ижектәргә тарҡатһаҡ, һәр ижеге, тип әйтерлек, **“һыу”** тигәнде белдерә:

*Уб* — Обь (йылға);

*(у)суҡ* — Соҡ (йылға); соу (һыу);

*Ҡуру* — Ҡура (йылға);

*Ҡурут* — Герат (йылға); һәм “а” вариантында:

*(а)басаҡар* — васаһер — васер (немецса һыу);

*Баса* — васа — Баҙы (йылға) — вода (урыҫса һыу);

*Аҡа* — Оҡа (йылға);

Ҡара, ҡаран (йылға);

*Ара* — әрә, рә, ра (йылға); һәм:

*Ра-аҡа* — раҡа, река (урыҫса йылға).

Һәм йәнә шул уҡ тәүтермин, “а” вариантында ижектәргә тарҡатһаҡ, **“ут”** тигәнде аңлата тулыһынса:

*Аба* — апа, Көн-апа (ут);

*(а)бас* — баҙ, баҙлап яныу (ут);

*(а)басаҡ* — баҫаҡ — быҫыҡ, быҫҡып яныу (ут);

*Саҡарат* — сағыр-ут, сығар ут;

*Ҡарат* — ғарәт — горит (урыҫса “яна”); гөрт (гөртләп тоҡана).

Һәм ошо ***басҡарт//башҡорт*** терминынан уҡ килеп сыға беҙ төпсөрләгән ырыу атамаһы ***сарт//һарт:***

Басҡарт — бас-ҡарт — ҡарт//һарт//сарт.

Боронғо башҡорт һәм боронғо египет хоҙайҙарының берҙәйлеге әле килтерелгән миҫалдарҙағы Башҡортостандың ***Ра*** йылғаһы һәм боронғо Египеттың ***Ра*** хоҙайы исемдәрендә кәүҙәләнде; ә һуңынан боронғо египетта ***Ра*** хоҙайҙы алмаштырған ***Амон*** хоҙай ҙа башҡорттарҙа әлегәсә ***Аман*** булып йөрөп-ята: бер-беребеҙҙе осратһаҡ, ғәҙәттә, *“иҫән-аманмы?”* тип һорашып сәләм бирәбеҙ

ҙә *“иҫән-аман”*, тигән яуап сәләме алабыҙ, икеһендә лә боронғо Әсә-Хоҙай ***Аман (Амон)*** телгә һалына. Үтәнән-үтә күренеп тороуынса, сәләмләшеүҙәге тәүге һүҙ “иҫән” (исән) — *“әсән” (әсәң)* булған ул элек; һәм ошо сәйер сәләм дә, сит кешене осратҡанда хәрби пароль рәүешендә, *“әсәң Аман-Хоҙаймы?”* (Көнгә табынаһыңмы?) мәғәнәһендә аңлашылып, икенсеһе лә “әсәм Аман-Хоҙай” тип белдерһә, был әҙәмдәр бер-береһенә ят түгел, ә диндәштәр икәнлектәре асыҡланған да ҡындан ҡылыс һурылмайынса ҡалған. ***“Амон” (“Ам-Ана”)*** терминының беренсе өлөшө хөнәсә-гермафродит тәүбабабыҙ ***Ам-Ирҙең (Имирҙың) ам*** (ҡатын) яртыһы икәнлеген күрһәтә һәм, уның *“ир”* яртыһы *“ер”* булғандай, *Күк* икәнлеген аңлата; сөнки был бөйөк хоҙайбикәнең боронғо тулы исеме ***Ас-Ам-Ан-Аба*** әйтелеп, *“ас” — әсә, “ам” — әм* (әсәлек енси ағза), *“ан” — ана (инә), “аба” — апа* (өләсәй) булып тора. Бына шул тулы әйтелештәге исемдең тәүге өлөшөнән төрки телендәге Күк — *ас-ам-ан, Асаман//****Асман*** термины һәм икенсе яртыһынан уның славян телдәрендәге алмашы *ан-аба — анаба, наба//****Небо*** килеп сыҡҡан, баяғы боронғо сәләмләүселәр ғәмәлдә ошо хоҙайбикәне күҙ уңында тотҡандар.Тимәк, уртаҡ тел табып сәләмләшеүсе ике яҡ та ***Аман-Амонға —*** изге ***Көн-Утҡа*** табыныусылар икән.

*3*

Боронғо утҡа табыныусыларҙың хәҙерге башҡорт һәм үзбәк телдәрендәге ҡалдыҡтары фәһемле.

Боронғо Египет дин үҙәктәренең береһе булған Иун-та-нечерт ҡалаһының исемен гректар шул боронғо тере теллә исемләнешенән *Тентюра* тип яҙып алған һәм ул хәҙерге *Дендерә* ауылы рәүешендә һаҡланған. Унда борон Һары (Хор) Көн хоҙайының ҡатыны Ҡотҡар (һт-һр) хоҙайбикәгә табынғандар һәм ул хоҙайбикәнең иң ныҡ таралған ләҡәбе *“һөлт”* (“алтын”) булған (М.А. Коростовцев, 107-108-се биттәр), ә был термин иһә хәҙерге башҡорт телендәге *“һөлт” (гөлт)* итеп ут ҡабыныуҙы һәм инглиз телендәге *“һолд”* — алтын йәғни һары ут төҫөндәге балҡышлы металлды белдерә. Ә боронғо Египеттың утҡа табыныу ҡорамы *Тентюра//Дендерә* иһә һүҙ төҙөлөшөндә *ут-ана-тора* өлөштәренән уҡмашып, хәҙерге үзбәк телендәге *тәндер* (көршәк-мейес) һәм башҡорт телендәге *тандыр* (мейестәге талғын ғына көйрәп яныусы ут) һүҙҙәренә тура килә. Боронғо Урта Азиялағы Согдиана (Согд) дәүләтенә исем биреүсе утҡа табыныу үҙәге ***Сагут*** та тап ана шул “усаҡ-ут” (усағут) йәки ут яғылған һауыт//сауыт (сағут) төшөнсәһенә бәйле; үҙәгендә шундай усаҡ-ут (сағут) дөрләп торған Урта Азия Соғт (Согд) тупрағынан тыш, боронғо Египет иле ҡалаһы Саути ҙа булған (грекса *Ликополис* — “Бүре ҡалаһы”), хәҙерге ғәрәп телендә лә ул Ассиут (Әсәй-ут) тип йөрөтөлә (М.А. Коростовцев, 106-сы бит).

Шулай итеп, *сагут (саут//һаут)* — ут һаҡлағыс *һауыт* мәғәнәһендә. *Саг-ут* итеп ике өлөшкә бүлһәк, беренсе өлөшө аңлата:

*Саг* — сау//һау;

*Саҡ* — һаҡ, һаҡлаусы;

*Саҡ* — һаҡ, һаҡ кеше;

*Саҡ* (этноним) — утҡа табыныусы (боронғо башҡорттар);

*Саҡ* (саҡ-ут — сәғәт) — ваҡыт.

Тимәк, изге *сагут* (һауыт) эсендә һәр *ваҡыт һау* ут янып торһон өсөн, уны *һаҡлаусы һаҡ* кеше бағырға тейеш. Ут бөтә әйләнә-тирә яҡтың изге хоҙайы булған, уның һүнеүе — халыҡ һәләкәте һаналған. Шуға күрә кешеләр, бер-береһе менән осрашҡанда, ауыҙ асыуҙан уҡ изге уттың хәлен һорашҡандар: "сағмы?" (һаумы?) — "сағ" (һау); шуны башҡорт әлегәсә онотмайынса ҡабатлай. Әҙәм теленең ысын тарих икәнлеген таныусы ғалимдар хаҡлы: "Тел ул мәҙәниәттең ғәҙәттән тыш тотороҡло күренеше, һүҙҙәрҙе һәм уларҙың төҙөлөш ҡиәфәттәрен күп быуаттар һәм хатта меңәрләгән йылдар буйынса һаҡлап килеүсе матдәләренең береһе булып тора" (М.В. Крюков, М.В. Софронов, Н.Н. Чебоксаров. Древние китайцы: проблемы этногенеза. М., 1978, 60-сы бит).

Утҡа табыныусы боронғо бабаларыбыҙ аңында Көн-ут хоҙай ерҙә бүре-эт ҡиәфәтендә *лә* йөрөгән (башҡорт ҡарыһүҙендәге Урҙас-биҙең ҡыҙын бүре ҡиәфәтенә кермеш Көн нуры быуаҙыта), ат булып та елгән, үгеҙ булып та ығышлаған; ана шул "ут"лыҡ уларҙың исемдәренән үк үтә күренеп фашлана: эт — ут, ат — ут, үгеҙ (гүҙ) — ҡуҙ (утлы ҡуҙ)... Изге утты һаҡлау үҙәгенең исемдәре *көр-ут* — ҡорт (город), *пак-ут* — пагода, *мәсе-ут* — мәсет тигән изге ҡорам төшөнсәләрен биргән, ул ҡорамдарҙағы изге утты һаҡлаусылар *абыҙ* — быҙлатыусы, *баҡ (бәк, бог, маг)* — бағыусы, *ҡот (һоот)* — ҡотҡарыусы, *жрец* — ажар-әсә (утсы-әсә) тип йөрөтөлгән. Боронғо Египет ҡомартҡылары араһында *Апис-үгеҙҙең* (үҙебеҙҙең *абыҙ-үгеҙҙең!)* мөгөҙҙәре сатаһында Көн балҡытмыш бронза һындары күп табылған (М.А. Коростовцев, 15-се бит)."Абыҙ", билдәле булыуынса, башҡорт телендә "бөтә фәндәргә маһир ир" тигәнде аңлата, ә боронғо Египетта *Абжу* (Абыҙ) ҡалаһы булған, кешеләре *эт-әсәгә* табынған (М.А. Коростовцев, 118-се бит); хәҙерге Башҡортостандағы *Әбеш* һәм *Әбетәй* ауыл исемдәре *лә* боронғо Египеттың *Апис* һәм *Абидос* ҡала исемдәренә тап килә. Боронғо Египеттың Гелиополь ("Көн-ҡала") үҙәгендә *Мневис (Менеүсе* йәғни һыйырға менеүсе) үгеҙгә табынһалар, Гермонт ҡалаһындағы был үгеҙ-хоҙай атамаһы *Бухис* булған һәм *ул* боронғо иероглифтарҙа *бһ* тип тә яҙылған, ә был иһә үҙебеҙҙең буғуҙ//мөгөҙ һәм бүһәй//бүгәй икәне ап-асыҡ. Боронғо Египеттың ут хоҙайҙарынан бүре *Ассиут* — әсәй-ут, эт-әсә, *Упуаут* — апа-ут, *Анубис* — ана-быҫ (быҫҡыусы ут). Был хоҙайҙарҙың ҡулдан яһалмыш һындары, уларҙың боронғо Египетҡа төньяҡтан (Уралдан) килгәнлектәрен белдертеп, ҡара төҫкә (төн яғы төҫөнә) буялыр булған. Дини байрамдарҙа "ҡолға башына ултыртылған бүре һынын ҡорамдан сығарғандар һәм ул дөгө хоҙайы Әсә-Ырыҫҡа (Осирисҡа) юл күрһәтеүсе һәм юлбашсы булған" (М.А. Коростовцев, 127-се бит). Уралдағы башҡорттарҙа *ла* бүре-юлбашсы тураһындағы риүәйәттәр киң билдәле (Археология и этнография Башкирии, т. IV. Уфа, 1971, 224-се бит). Боронғо Египеттың шулай уҡ ҡара төҫкә буялған аталыҡ (фаллос) хоҙайы ***Мин*** дә башҡорттарҙың 921 йылда Ибне Фаҙлан күргән аталыҡ (фаллос) хоҙайына (Путешествие Ибне Фадлана на Волгу. М.,-Л., 1939, 66-67-се биттәр) туп-тура бәйле, борон-борондан Башҡортостандың Нуғай юлы *Мин* ылыҫында (улусында) йәшәүсе *Мин (мен//мең)* ырыуы әле *лә* бар.

*4*

Тәүдиндәге боронғо Египет — Башҡорт йәнәшәлектәрен ошолай бер килке иҫәпкә алғандан һуң, шул уҡ диндә тотмош боронғо Кесе Азиялағы Сард//Һарт (*Лидия*) дәүләтендә *лә* ысынлап та ҡасандыр Уралдан күсенеп китмеш үҙебеҙҙең ҡәүемдәр — башҡорт-һарттар йәшәгәнлеге әллә ни шик тыуҙырмай. Боронғо Египет фирғәүене ғәскәрендә боронғо *Лидия* (Һарт) һалдаттарының хеҙмәт итеүҙәре, б.э. тиклем VII быуаттан ҡалған иң боронғо һарт яҙыуының да Египеттан табылғанлығы мәғлүм.

Б.э. тиклем 546 йылда *Лидияны* фарсы-үҫәргән батшаһы Гөрөш (Кир) I баҫып ала, IV быуатта уны Искәндәр Зөлҡәрнәйен (Александр Македонский) яулай, ә II быуатта ул Бүре-ағам (Пергам) батшалығына буйһона. 133 йылда иһә *Лидия* ерҙәре Рим империяһының Азиялағы бер өлкәһенә әйләнә. Күренеүенсә, аҙаҡ "урал-алтай телдәре ғаиләһе"нә төркөмләндерелмеш төрки телле халыҡтар үҙ тарихтарында был донъяның әсе-сөсөһөнән ни күрһә, *Лидия* һарттары *ла* тап шуны күрә...

Шанлы баш ҡалаһы Сард (Һарт) булған *Лидия* дәүләтенә исем биреүсе *"лид"* һүҙен ғалимдар төрлөсә төпсөрләйҙәр: имеш, ул урыҫтың *"люди"* һүҙенә *лә*, немецтың *"леуте"* һәм латиндарҙың *"лат"* һүҙенә *лә* тап килә *лә* ул һарттарҙың теленең һинд-европа телдәренә ҡарағанлығы аңлашыла. Шул уҡ ваҡытта төрки (урал-алтай) телле боронғо башҡорттоң "ул-ат//ул-ата" йәғни ул менән атаны (ир енесе кешеләрен) хәҙерге "ир-ат" мәғәнәһендә төркөмләүсе "ирҙәр" төшөнсәһендәге термин-һүҙе барлығы уларҙың береһенең дә башына килмәй (ә бит шул "улат"тан — "лат//лид" тыуған)... *Лидия* һарттары үҙҙәрен йәнә, табынмыш хоҙайҙары буйынсалыр, "меон" (мыяу-ан — бесәй кешеләре) йәки "мавн" (мав-ан — ҡыр бесәйе мав кешеләре) тип тә йөрөткәндәр, был иһә боронғо Египет динендә Көн-Әсәнең ер йөҙөндәге һынын кәүҙәләндермеш "меса"ға (мәсегә йәғни бесәйгә) тура килеп, бөгөнгө башҡорт халҡының Үҫәргән ырыуындағы *меон-аҡ — муйнаҡ* араһы башҡорттары рәүешендә *лә* сағыла. Һарттарҙың баш ҡалаһы *Сард (һарт)* ҡайһы бер ғалимдар фекеренсә, *Сфард* тип тә әйтелгән, ә был иһә "башҡорт" — *абасһард* тигәндең ҡыҫҡартылмыш өлөшө генә: (аба)сһард — *сһард//сфард,* шунан башҡортса сһар — *шәһәр* термины һәм урыҫса (са)һарат — *һарат//город* термины килеп сыҡҡандыр.

Фән донъяһында ошоғаса һарт-лидия телендә яҙылмыш 64 яҙыу билдәле, шулар араһында тәңкә-монета легендаһы *валвал* бар (донъяла тәңкә-монетаны тәүбашлап һарттар һуҡҡандар). Яҙыуҙарҙың бөтәһе *лә* тип әйтерлек *Лидия* дәүләтенең үҙ тупрағынан, шул иҫәптән иң күп өлөшө (39) баш ҡала Сардтан табылған. *Лидия* телен ныҡлап тикшереүсе В.В. Шеворошкин әйтеүенсә, "лидия теленең өлгөләре бик аҙ ҡалған, байтаҡ яҙыуҙарҙың йөкмәткеһе һис аңлашылмай" (В.В. Шеворошкин. *Лидийский язык*. М., 1967, 9-сы бит; артабан: В.В. Шеворошкин). *Ләкин* был "һис аңлашылмай"ҙың аңлайышлы сәбәбе бар, минеңсә: хөрмәтле ғалимдар В.В. Шеворошкин да, И. Фридрих та, үҙҙәренән элгәреге П. Мериджи кеүек үк, "европоцентризм" тигән зәхмәт-сиргә һуҡлығып, һарт яҙыуҙарын был ғалимдарҙың әсә телдәренә яҡын туған *һинд-европа* телдәре ярҙамында ғына фашлап уҡырға тырышалар, ә донъяла әлегәсә теп-тере башҡорт

һарттары һәм уларҙың башҡорт-төрки теле барлығын иһә ике ятып бер төштәренә *лә* керетмәйҙәр: “Хәҙерге ваҡытта Мериджиҙың фекере абруйлы һанала, ул иһә *лидтар* теле, *ликтарҙыҡы* һымаҡ уҡ, *һинд-европа* теле булып тора, тип иҫәпләй”, — тиҙәр улар (И. Фридрих. Дешифровка забытых письменных языков. М., 1961, 121-122-се биттәр; артабан: И. Фридрих). “Хеттолог П. Мериджи хеҙмәттәрендә *лидтар* теленең үҙенсәлеге *һинд-европалы* хет-лувий теле булараҡ асыҡланды” (В.В. Шеворошкин, 17-се бит). Шуныһы үкенесле: был ғалимдар, һарттарҙың телен *флексиялы* (бөгөлөшлө) һәм сингармонияһыҙ һинд-европа телдәр ғаиләһенә алдан алдырта керетеп һәм *агглютинациялы* (теркәлешле) һәм сингармониялы төрки телдәрҙе иҫәптән сығарып ташлап, һөҙөмтәлә *лид//һарт* телендәге шул агглютинация һәм сингармония ҡанундарындағы һүҙҙәрҙе яһалма рәүештә емереп һәм бүлгесләп (В.В. Шеворошкин, 47-54-се биттәр), мәғәнәһеҙ “флексия”лар килтереп сығаралар. “Хетт, карий һәм *лид* телдәренең мөһим оҡшашлыҡтары... флексия өлкәһендә асыҡлана, ә флексия тел төҙөлөшөнөң ифрат тотороҡло өлөшө булып тора”, — тип яҙа был хөрмәтле авторыбыҙ (19-сы бит), әйтерһең дә, агглютинация күренеше тотороҡлоларҙан түгел... Ә ғөмүмән алғанда, тел белемендә аралары бейек “ҡытай диуары” менән айырып ҡуйылған *һинд-европа* телдәр ғаиләһе һәм *урал-алтай* телдәр ғаиләһе икеһе бер үк олондан ботаҡланған: уларҙың олоно *ла*, тамыры *ла* бер-уртаҡ — *тәүтел* булған, быны инде бик күп ғалимдар таный (Древние китайцы, 62-се бит). Тимәк, В.В. Шеворошкин һарт теленең һүҙҙәрен аңлап-уҡыуҙа нигеҙ итеп алған һинд-европалы хетт-лувий телдәре *лә*, урал-алтайлы башҡорт-төрки теле *лә* бер-береһенә ят түгел, ә туғандар булып сыға, шуға күрә боронғо һарт телен тикшереүҙә башҡорт телен дә файҙаланыусы ғалимдар ота ғына. Миҫал өсөн, мөхтәрәм В.В. Шеворошкин теҙеп биргән бер килке һарт һүҙҙәренең уның тарафтан боронғо хетт-лувий телдәре нигеҙендә аңлап-уҡылышына уларҙың бөгөнгө башҡорт теле (текста ул Башҡ. тип ҡыҫҡартып киҫәтелгән) нигеҙендә минең тарафтан аңлап-уҡылышын өҫтәп бирәм, шулар аша боронғо һарттарҙың ысынлап та башҡорт телендә һөйләшкәнлектәре фашлана:

***Аара*** — “ихата”, “йорт”: хет. *Арһа* “сик”,”өлкә”;

Башҡ. *Ара* “дөйөм ерҙән файҙаланыусы ырыуҙаштар төркөмө”, “ике ер араһы (сик)”;*ҡу ара (ҡура)* “мал аҙбары”; *аран* “ерҙе ҡаҙып эшләнгән мал торлағы”.

Хетт һүҙе *арһа* шулай уҡ “тышҡы яҡ”, “сик аръяғы” тигәнде *лә* аңлата икән, ә Башҡ. шул уҡ мәғәнәләге *арғы, ары, ары табан* һүҙҙәре бар.

***Афари*** — “һатырға алып барыу”: хет. *һаппараи* “тапшырыу”, “һатыу”; лик. *Ҡппара.*

Күренеүенсә, һарт һүҙендәге тәүге “һ” өнө юйылған, һәм бер үк мәғәнәләге Башҡ. һүҙендә *лә* ул юғала: *алыппара//апара.*

***Амас*** — “һөйөүсе” (?): лат. *Амо* “һөйәм”;

Башҡ. *Әм-әсә* “инәлек”, *(а)мас килешеү* “икәүҙең һөйөшөп ярашыуы”.

***Асаа*** — “яҡын күреү”: хет. *Асийа*, лув. *Аси* “яратыу”;

Башҡ. *Әсә,* (ә)сәйә,сөйә//һөйә.

***Ауҡа*** — “хаҡлы”, “ысын” мәғәнәһендәге рәүеш килеш;

Башҡ. *Ау* (һунар, балыҡ ауы); *ауҡан* “кешеһеҙ тыныс урын”.

***Анте*** — “билдәләү”: хет. *Һандаи* “тәртипкә килтереү”, “ҡулайлаштырыу”; *лик. Ҡнта* “күрһәтмә биреү”;

Башҡ. *Анса* “шул тиклем” (билдәләү), *анда* “шунда”; хет. *Һандау* һәм Башҡ. *Һанда* “шунса һанда”; *лат. Анте,* бор. Һинд. *Анти* “алда” һәм Башҡ. *Анта* “унда — алда”.

***Би*** — “биреү”: хет. *Паи, лув. Пийа, лик. Пийе* “билдәләү”;

*Башҡ. Би, бай, би-ир//бир “биреү”.*

***Бира*** — “өй”: хет. *Пир//пер, лув. Парна* “өй”;

Башҡ. *Бура* “өй” һәм *бүрәнә* “өй бурау әрҙәнәһе”.

***Борли//форли*** — “йыл”: *лик. Прули* “йыл”, хет. *Пурулли* “яңы йыл байрамы”;

Башҡ. *Борол* “әйләнеш”, “йыл әйләнәһе”; шул һүҙҙән, “р” өнө “й”-ға күсеп: *бойол//быйыл//йыл.*

***Бруа*** — “йыл”: Башҡ. *Бруа-ҡот — бер ваҡыт,* шул *ҡот* “ҡояш-бәхет” һүҙенән, моғайын, урыҫ һүҙе *год* “йыл” хасил булған.

***Брафр//брафра*** — *“дини туғанлыҡ”: лат. Фратер;*

*Башҡ. Бәрәбәр “бер тигеҙ”.*

***Элэйү(и)*** — “хоҙай”: башҡ. *Илаһу(и)* “хоҙай”.

***Дат*** — “биреү”: башҡ. *Тот* “ҡулыңа тот” (биреү).

***Эса:*** хет. *Һасса* “ейән”, лик. *Ҡзэе* “бүлә”;

Башҡ. *Кесе* “кесе бала”.

***Энә*** — “әсә”: *лик. Әни, лув. Анни,* хет. *Анна* “әсә”;

*Башҡ. Әни, ана, инә, әннә “әсә”.*

***Эн-сарб*** — “яҙыу” (дөрөҫөрәге, “сыйыу” йәки “һөрөү”): Башҡ. *Энә-сөрөб* “энә һөрөп”, энә осон сыйып яҙыу.

***Әтам*** — “күрһәтмә”, “атама”: Башҡ. *Әйтем, атама.*

***Әтҡара*** — “үтәй”, “эшләй”: Башҡ. *Атҡара.*

***Фа-балҡо:*** хет.-лув. *Палһ* “яҫы”;

Башҡ. *Уба-балкан* “яҫы тау”.

***Фа-ҡарсе*** — “емереү”: хет. *Ҡарс* “бүлеү”, “ҡырҡыу”, “иғтибарҙан ситтә ҡалдырыу”;

*Башҡ. Мә-керсе//мәкерсе “мәкерле кеше”, ҡырыусы, ҡаршы.*

***Ифрли*** — *“ишек ватып инеүсе”: Башҡ. Убырлы (ҡарсыҡ).*

***Ҡат-сарлоҡи*** — “һәләк итеү”, “ләғнәтләү”: Башҡ. *Ҡот-осарлыҡ* “ҡурҡыныс”.

***Ҡофу*** — “һыу”: Башҡ. *Ҡаф-ыу* “Ҡаф тауынан ағып төшкән һыу”.

***Лале*** — “һөйләү”: хет. *Лала* “тел”, лув. *Лали, лик. Ләли* “яҙыу”;

Башҡ. *Һлале//һөйләле* “һөйләшеү ағзалы”, “телле”.

***Мру-уаа*** — “ҡәбер ташы”: Башҡ. *Мур-уба* “үлек убаһы”.

***Нарыш*** — исем, “ир”, “батыр” тигән һымаҡ: Башҡ. *Нарыш* “Нары тауҙан тыуған” мәғәнәһендәге ир (Урал батыр) ләҡәбе.

***Ни*** — “ни”: Башҡ. *Ни,* мәҫәлән, “ни алға, ни артҡа”.

***Ҡи//ҡы:*** Башҡ. *Ҡи//ки,* мәҫ., “алдыҡ ҡи”, “йә ки”.

**Ҡира** — “мөлкәт”: Башҡ. Ҡура, кәртә-ҡура.

***Сау*** — “байлыҡ”: Башҡ. *Сау//һау* “сәләмәт”, *сауын//һауын, саумал//һаумал* “һөт байлығы”.

***Серли*** — “өҫкө”, “башлыҡ”: Башҡ. *Сарлаҡ* “өйҙөң иң өҫкө ҡаты, өй башы”.

***Срфасти*** — “өҫтән баҫыу”: Башҡ. *Сәрбаҫты* “сәр йәғни батша баҫты”, *сәрбазсы, сәрбаз* “баҫып алыусы, яугир”.

***Тарб*** — “эйә булыу”, “берәй нәмәгә тарыу”: Башҡ. *Тарып, тарыу* (шул уҡ мәғәнәлә).

***Таше*** — “таш бағана”: лув. *Таси* “яҙыулы таш”, “стела”;

*Башҡ. Ташы, ҡәбер ташы.*

***Таусе*** — “ҡеүәтле”: Башҡ. *Таусы* “тау эйәһе”.

***Тро//тор*** — “хәбәр”: хет. *Тар,* Башҡ. *Тар//таратыу* “хәбәр таратыу”, *тирә* “хәбәр тирә”, урыҫ. *тараторит.*

***Тешә:*** лик. *Тези* “саркофаг”, “ләхет”;

Башҡ. *Төшә* “ҡәбергә төшә”.

***Бана*** — “кәшәнә”, “үлек йорто”: Башҡ. *Бина* “таш йорт”.

Боронғо һарт кеше исемдәренең мәғәнәләре лә фәһемле:

**Абарнас:** әүернәсе;

**Алус:** алыусы;

**Артабанас:** артабан үҫ;

**Артаҡсасса:** арт аҡсасы//артым аҡсаһы;

**Аликсантру:** олоғ исән тор;

**Армаули:** ырмаулы, арбаулы;

**Асни:** әсә-әни//әсәни, әсән;

**Атали:** аталы;

Атас//Атес: атас//әтәс;

**Баҡиуали:** баҡи-вәли;

**Ибси:** ипсе;

**Ҡарос:** ҡорос//ҡарыш;

**Ҡатоуас:** ҡот-абыз//ҡот-ауаз;

**Манес:** маныс;

***Мариуда:*** *мәреүҙә* (ҡар мәреүҙә тыуған);

Митраташ: митраташ;

**Наннас:** нәннәс;

**Саса:** сәсә;

***Санта*** — Сандес хоҙайҙың исеме: *сантый//һантый* (изге);

**Сфар:** сәфәр;

**Тиудаш** — хоҙай исеме: дейеүҙәш;

***Валвел*** (тәңкәләге яҙыу): *бол-бол (былбыл)* “аҡса”.

Һарт яҙыуының хәрефтәренә килгәндә, ул башҡорттоң боронғо *ырын (рун)* хәрефтәре менән бер иш, шул уҡ ваҡытта бер аҙ айырма ла бар. Бына боронғо Һарт (Сард) ҡалаһы емереклектәрендә табылған, ташҡа яҙылған текст:


Текст № 1
из фотокопии (в книге Фридриха).
Направление письма справа налево (←).
(по изд. „Sardis")

Һарт (лид) яҙыуының алфавиты (таблицанан боронғо һарттарҙың бөгөнгө башҡорт телендә һөйләшеүе асыҡ күренә):

| Буквы<br>1 | Эквивалент<br>2 | От какого башкирского слова происходит<br>3 | Значение (перевод)<br>4 |
|---|---|---|---|
| A | a | a(t), a(tum) | имя, мое имя; Прабог (египет.), конь, конь мой |
| M | e | e(t) | собака |
| 8 | b | b(əbək) | ребенок |
| ↑ | elə | elə | дверной крючок |
| [illegible] λ | d | d(or) [tor] | стоящий |
| [illegible] | je | je(len) | вымя (с двумя отростками-сосками -- человека и кобылы, с четерымя – коровы |
| ᛉ | ə | (j)ə( p) | развилина (вилы) |
| 8 8 | f | f[u]f | колодка-оковы |
| Ɔ | ʒ | ʒ[uʒuk] [haʒak] | колдец для стрел, колчан |
| 1 | i | i[nə] | иголка |
| ◁ | ɵ | ɵ(лөш) | доля (Луны) |
| Я | k, q | k[irt] | зарубка |
| 1 | el | [k]el[ ə] | дверной крючок, букв. “запирай-крючок (полслова) |
| ᛯ | qulan | qulan, qolon | кулан (полное слово) |
| ᛘ | m | m[aral] | марал |
| ч ч | na | na[r] | одногорбый верблюд |
| ƻ Ɛ | in | in | метка на ухе животного |
| 0 | olana | olana [lana, luna] | почтенная мать (Луна) (полное слово) |
| + Φ | p | p[akut] (бәхет) | хранитель-огонь, чистый огонь, беспорочный огонь, счастье (Солнце) |
| q | r | (ə)r | мужчина, человек, воин |
| I ‡ ₮ | s | s[ap] | руби, обрубок, рукоять |
| X | iks | ik[e]s[ap] | дважды руби, два обрубка |
| Ʃ ϟ 3 | z | z[ep] [zep, jep] | нитка |
| T | t | t[abar] [topor] | топор |
| ᛦ | u | u[kusək] | стрела-вырост (сук), дубина |
| ⅂ | v | v[al] [fal] | фалл, мужской половой член |

Баяғы айырмалыҡлы хәрефтәрҙе ҡарайыҡ:

**+** (пак-ут йәки факт//фәҡәт) — **ф, п** хәрефтәре, **Көн** билдәһе.

**О** (олана//оло-ана) — **о** хәрефе, тулған **Ай** билдәһе. Шул “олана”нан — *Лана//Луна* (Ай) һәм *Лоно//Лена* (һыу сығанағы).

**D** (өлөш, өләшә, өләсә, ләшә) — **ө** хәрефе, ярым **Ай** билдәһе.

**Иҫкәртмә:** Айҙың “ҡайыҡ-кәмә”гә әйләнгән һәм “ҡайыҡ” эсенә “эшләпәле ишкәксе” ултырған күренешендәге 3-сө бер миҙгелен — **э** (эләтә, илетә, илата) — **э** хәрефен бирер сирек **Ай** — Аҫҡы Донъяға (Дат Донъяһына) үлекте илтеүсе ҡайғылы ҡайыҡ билдәһен һарт яҙыуында уның “эшләпәле ишкәксе”һе — осо өҫкә ҡаратылған уҡ (**1**) билдәһе алмаштырған; был ишкәксе ултырған ҡайыҡ-кәмә — сирек **Ай** (э) боронғо Египет динендә мәйетте күктең Элата (*Лата//Лета*) һыуынан “иминтит” яғына — көнбайышҡа — үлектәрҙең Дат Донъяһына илтә, тип һаналған; боронғо Египет динендәге был “иминтит” — хәҙерге башҡортса “именте ит” (“именле ит” йәки “иманлы ит”) тигәнгә тура килеп, үлектәр донъяһының мәңге именлеген аңлатһа, ә үлекте ағыҙып алып китеүсе Элата (*Лета*) һыуы иһә әле лә урыҫ әйтемендәге “канула в *Лету*” (әйләнеп ҡайтмаҫҡа китте)

рәүешендә билдәле. Урта Азия һарттарында (үзбәктәрҙә) әлегәсә мәйетте ҡәбергә оҙатҡанда "ай Дат, вай Дат!" тип аҡырып илау (элата//илата) йолаһы бар, ә был иһә тәүге замандарҙа "Айы Дат, байы Дат!" булып, "Дат Айы, Датҡа байы!" йәғни "үлекте Дат Донъяһына илтеп еткер, Дат Айы", мәғәнәһен йөкмәгән.

**О-о** (буб? Фуф? Йәғни икеләтә б һәм ф?) — **уб-уб** (ҡуш уба) тигән ҡушма һүҙ; шунан хәҙерге телдәге һүҙҙәребеҙ:

***Уб-уб-ан*** — *бубан//бупан,* ике аяҡ бығауы, тышау; шул уҡ ваҡытта *бупан* — боронғо башҡорттоң ҡышҡы һыуыҡтарҙа урманға барғанда күн итек тышынан биләүләй торған кейеҙ урамаһы (обмоткаһы).

*Бубен* — муйын бығауы (шалтырауығы);

*Буб//бау* (еп) һәм *бау* (нәҫел ебе);

*Боб* — борсаҡ теҙеме (ҡуҙаҡта).

Ғөмүмән алғанда, һарт алфавиты донъялағы бөтә халыҡтар алфавиттарының башланғысы, ата-әсәһе булып тора. "П. Мериджи мәҡәләһе сыҡҡандан һуң, — ти В.В. Шеворошкин (58-се бит), — Кесе Азия халыҡтары үҙҙәренең хәрефле яҙмаларын гректарҙан алған, тигән тезис бик ышандырып етмәй... Гректар, моғайын, үҙҙәренә тиклемге хәрефле әҙер яҙыуҙы файҙаланғандар". Тимәк, башҡорт һарттарының яҙыуын.

Шулай ҙа, үкенескә ҡаршы, өҫтәрәк әйтелгән сәбәп арҡаһындалыр, ғалимдар һарт яҙыуҙарын еренә еткереп дөрөҫ уҡый алмағандар.

5

Был ғалимдар һарт яҙыу ҡомарткылары араһында өс "билинг" (билинг - бер үк текстың ике телдә яҙылышы) бар, тип иҫәпләй һәм шул нигеҙҙә уларҙы уҡырға тырыша. Ләкин "өсәү" тигәндәренең береһе — һарт тексының яҡынса йөкмәткеһенең генә грекса иншаһы, ә икеһе бөтөнләй билинг түгел булып сыҡты. Шуға күрә уларҙың урыҫсаға хата уҡылыштарын бында күсермәй, минең тарафтан яңынан хәрефләп уҡылған һәм транскрипциялаған боронғо төп нөсхә юлдары аҫтында туп-тура бөгөнгө башҡортса яҙылыштары бирелә (тексҡа иҫкәртмәләр – текст Аҙағында):

**1. Нәннә-әсә ваҡиу алиса артиму(ҡ) ҡулан.**

Нәннә-әсә бағыу алһа, артмаҡ улан.

**2. Ошоно төзөнө асанил[2] бартараз[3] эләата ит.**

Ошоно төҙөнө асанил Бартараз, үлә-ата[4] ит (уны).

Боронғо һарт яҙыуының И. Фридрих китабына (119-120-се биттәр) ингән иң ҙур күләмле тексы ла унда яңылыш транскрипцияланып, уҡылышы ла буталсыҡ булғанлыҡтан, бында ла яңынан уҡып транскрипциялау һәм шул төп нөсхә аҫтында бөгөнгө башҡортса уҡылышы теркәлә:

**[(1*)] борлк[1] (к)улан икс арт аксас[2] сак[3] (к)улан пак (к)улан мак**

---

[2] Асан — тәхет (ДТС, 59-сы бит); асан-ил — ил тәхетенең эйәһе (батша).

[3] Барт — ватыу, өҙөү (ДТС, 85-се бит); ар — бүлеү (ДТС, 50-се бит); аз — ҡомһоҙлоҡ (ДТС,71-се бит), йәғни йәмғеһе бергә ҡушма һүҙ бартараз — "ватыусы-бүлеүсе-ҡомһоҙ" батша ләҡәбе.

[4] Үлә-ата — үлектәр иленең ("теге донъя"ның) атаһы (батшаһы).

Бүрелекле улан, ике-өс арт(ым) аҡсаһы һал, улан; пак улан, маҡ
**(ҡ)улан уҡ (ҡ)улан дин- (1) аҡ (ҡ)улан исел ҡулан баҡи[4] элэлк[4]**
улан, уҡ улан, тыйнаҡ улан, иҫле улан, баҡи-үләлек
**ҡулан йест мруд усск вэ нас- (2) эл априсаҡ пу[5]**
улан, ишет морат: үҫәсәк вә нәҫел апарасаҡ был (донъяның)
**Элаҡ[5] ҡудк ит ист йес ҡулан вэ неслн ҡалид (3)**
Ылаҡ-ҡутаҡы ит(һен) һине; ишет, йәш улан, вә нәҫелең ҡалдыр;
**Бҡ (ҡ)улан тар в оланад**
Буҡа (буға-хоҙай), улан тар (ҡәберҙә) вә оланада (Ай ҡайығында)
**аҡад мануел[6] ит н[эпис] уск (ҡ)улан мруҡ (ҡ)улан**
аҡҡанда (уны) мәнеле ит; нәфис үҫкән улан, мәргән улан,
**Буҡ[7] уск (ҡ)улан вэ наҡ (ҡ)улан бҡ (ҡ)улан**
Буға (булып) үҫкән улан вә ныҡ улан, буға улан —
**тарвод (6) аҡтин непис пуел элҡ пн сҡ (ҡ)улан**
тар убала (ҡәберҙә); аҡтан нәфис буйлы ылаҡ, фән соҡо, улан,
**иф ид фаҡмҡ (ҡ)улан артим ит (7) и блимсис артимуҡ**
ип ит, фәһемле-аҡ улан, артым ит; эй, белемһеҙ артмаҡ —
**ҡуелимсис аараҡ (ҡ)улан бира(ҡ)[8]**
килемһеҙ (ғилемһеҙ) әүәрәү, улан; (шуны бел), бура (дөйә-айғыр)
**ҡулани (8) бҡ ҡулани элаҡ (ҡ)улан в олана фуҡ (ҡ)улану**
уланы, буға уланы, ылаҡ уланы вә Ай-һыу уланы:
**пира(ҡ) ҡулан пу элҡ (ҡ)улан в би элҡ**
бура (дөйә-айғыр) уланы ла, был (ябай) ылаҡ уланы ла (вә) би-ылаҡ
**(ҡ)улан в элә[9] бапәнт[10].**
уланы ла (вә) үлә бупанда.

**Тексҡа иҫкәртмәләр**

**1. Борлҡ** — бөгөнгө башҡ. *Бүрелек,* урыҫ. *Брелоҡ* — изге имеҙеүсе һәм ҡурсалаусы бүре-әсәнең һынлы һүрәте; ҡурсалаусы рәүешендә сабыйҙарҙың муйындарына, бишектәренә һәм ҡымыҙ сүмесе ижауҙарға тағылған. Текстағы **"борлҡ (ҡ)улан"** — "бүрелекле улан" тигәнде аңлата; боронғо һарт тексында ташҡа, һүҙ аҙағындағы "ҡ" һәм уға теркәлеп килмеш икенсе һүҙ башындағы "ҡ", урынды һәм көстө артыҡ сарыф итмәҫ өсөн, икәү урынына бер генә "ҡ" итеп сыйылған, ә бында уның етешмәгән икенсеһе йәйәләр эсенә алып (ҡ) бирелә. Хәҙерге заманда муйынға тағылмалы затлы әйбер *кулон* да ана шул "(ҡ)улан"дан алынған һымаҡ.

**2. Аҡса** — хәҙер ҙә башҡ. *Аҡса.* Нумизматтар даирәһендә һарт тәңкәләре *валвал//бол-бол* исемендә билдәле булғанлыҡтан (һарттар, б.э. тиклем VII быуатта уҡ, аҡса әйләнешен ҡулланыусы донъялағы тәүгеләр булараҡ, бол-бол тәңкәләрен дә башлап һуҡҡан), бөгөнгө башҡ. телендә лә "аҡса" мәғәнәһендә "бол" (үзбәксә "пул") һүҙе барлығын әйтергә кәрәк.

Боронғо тәүтормош ҡоролошондағы бер-береһенә ҡаршы (дошман) ырыуҙар һуғышта бер-береһенең нәҫел-артым сығанағын — *ҡотон* (аталыҡ

ағзаһын) умыра ҡырҡып алғанлыҡтан – һәм был шумер балсыҡ китап һүрәттәрендә асыҡ сағыла! (кешенең "ҡотон алыу", "ҡотон осороу" төшөнсәһе ана шунан ҡалған) һәм ул *ҡот,* тәңкләп (тәңкәләп) һалып киптерелгәндән һуң донъялағы иң ҡиммәтле зат рәүешле, алыш-бирештә лә хәҙерге аҡса урынына йөрөгәнлектән, тора-бара ана шундай алыш-биреш затын ҡиммәтле йәнлек тиреһенән, буталдан (металлдан), ҡағыҙҙан һ.б. матдәләрҙән етештереү фекеренә лә килгәндәр.

**Аҡса** термины — *аҡ үсәк* (нәҫел орлоғо "аҡ"ты үҫтереүсе ағза) тигәндән хасил булған. Һәм шулай уҡ *ҡотанаҡ* (ҡот-анаҡ) "ҡот тыуҙырыусы" мәғәнәһендәге һүҙгә йәнә "ай" ялғанып, бутал (металл) тәңкәләр төшөнсәләре лә моронлаған:

*Ҡотанаҡай — ҡотанаҡа — катанка — тәнәкәй//тәнәй — тәнкә — деньга — донг;*

бындағы урыҫ һүҙе *катанка* — тәңкә һуғыу өсөн тапатылған бутал йәймәһе, *деньга* — аҡса; башҡ. *тәнәкәй//тәнәй* — сабый ир бала булһа, *тәнкә* — бутал аҡса; вьетнамса *донг* — аҡса.

Ә боронғо һарттың валвал (бал-бал//был-был) терминына килгәндә, ул да ни бары аталыҡ ағзаһының нәҫел ағы яралтыусы ҡуш тупалсағын (бал-бал) белдерә, быңа ни өсөн башҡортта әлегәсә, бәләкәс малайҙың итәге аҫтынан шул ояты ялт итеп күренеп ҡалһа, "һәй, был-былың осоп китмәһен!" тип, мәрәкәләп көлөшәләр, ә был иһә бик боронғо каннибализмға бәйле "ҡотоң осмаһын!"дан килә... Шул "бал" менән "аҡ" ты бергә ҡушып әйтһәк:

*бал-аҡ — бала,* был тигеҙләмәнең һул яғында — боронғо төркисә, уң яғында хәҙерге башҡортса бер үк һүҙ. Башҡорт һүҙе *"баласыҡ"тан* — урыҫ һүҙе *малачик//мальчик,* "бал" һүҙенән — инглизсә "бол" (туп) һәм киң билдәле "оят" термин "фалл" (фаллос). Каннибализм заманында дошмандың шул "бал"ын — ҡотон алыу өсөн һуғышта *тупар-балта//топор-балта* ҡулланылғанлыҡтан, был дәһшәтле яу ҡоралы исеменең килеп сығышы ла туп-тура аталыҡ ағзаһына — сексҡа барып бәйләнә, быны иһә яңы мәғәнә йөкмәтелеп үҙгәртелмеш "тупар-балта — буҡ сабырға ярап-ята", әйтеменән күрәбеҙ, әгәр мәҡәлде тәүге хәленә ҡайтарыбыраҡ тергеҙһәк:

*таба-ар — бал-ата, буҡысы-барға кереп-ҡаҙа!* Йәғни "табыусы-ир — бала атаһы, буҡысы барға (ҡатын-ҡыҙға) кереп-ҡаҙа!" — аталыҡты ололау һәм нәҫел үрсетергә саҡырып арбау был.

Аҡса-бол мәсьәләһендә йәнә лә урыҫ һүҙе "рубль" — *оро-бол* (аталыҡ ороһо), немец. "марка" — *бәрәкәй//мәрәкә* (шул уҡ), швед. "крон" — *аҡ-орон* тигәндәргә ҡайтып ҡалғандай...

**3. Саҡ** — сағыл//һауыл, сал//һал мәғәнәһендә килә.

**4. Баҡи элелк (ҡ)улан** — баҡи-үләлек улан, йәғни теге, мәңгелек, донъяға китәсәк улан.

**Пу элаҡ** — был донъяның ылағы йәғни кәзә тәкәһе, тигән һүҙ.

**6. Мануел** — мәнеле (синонимы *иманлы*). Был һүҙ *мәне* "ҡыр бесәйе" (ДТС, 336-сы бит) тигәндән килә, буғай; ә текста Көндөң ер йөҙөндәге ҡиәфәтенә — изге ҡыр бесәйенә йәғни утҡа табыныусы тураһында һүҙ бара.

**7. Буҡ (буғ)** — буғай//бүгәй "нәҫел үгеҙе". Боронғо Египет фирғәүене Тутмос III ғали йәнәптәренең *ләҡәбе* менән сағыштырығыҙ: "Хөр, Фива ҡалаһын балҡытмыш мөслө Бүгәй" (М.А. Коростовцев, 150-се бит).

**8. Бира (бөйрә)** — боронғо төркисә *бура* "дөйә айғыры"; башҡ. *бура һыйыр* "бейек һыйыр" һәм *бура* "өй", "өй бураһы", *бура-ана//бүрәнә* "өй бурарлыҡ ағас әрҙәнәһе". Боронғо Египет динендәге Көн-хоҙай *ләҡәбе Буга-Ра* һәм уның изге ҡорамы *Пер-аа* (М.А. Коростовцев, 148, 157-се биттәр) шулай уҡ үҙебеҙҙең башҡорт һүҙҙәре — "буға" һәм "бүрәнә" булып торалыр. "Буға-Ра"нан һүҙҙәребеҙ *бойора, өйөрә, өй* һәм шул уҡ мәғәнәләге инглиз һүҙе *бюро* килеп сыҡҡандай. Ошоларҙы иҫәпкә алғанда, атаҡлы боронғо Египет пирамидалары ла үҙҙәренең ошо аталышын *бира-маат(а)* "Маат бураһы" *ләҡәбенән* алғандай (Маат — бөтә донъяны тәртиптә тотоусы бөйөк хоҙайбикә, йәғни инәлек ағзаһы). Был донъяға инәһенән башы менән сыҡмыш фирғәүен, үлгәс, шул уҡ "инәһе" "бура-маата"ға (пирамидаға) — кире ҡабат теге донъяға аяғын алға һондортоп оҙатылған (хәҙерге башҡорт йолаһы). Әгәр ҙә иғтибар итһәгеҙ, пирамиданың тышҡы өскөл һынланышы һәм эсендәге юлаҡтары күпмелер дәрәжәлә ҡатын-ҡыҙҙың инәлек ағзаһы һыҙаттарын ҡабатлай. "Пирамида" һүҙе башҡортта "бура-маҙа" (тыныслыҡ өйө) әйтелеп, шул "маҙа"нан "маҙар" (үлек өйө) термины моронлаған. Ә боронғо Египеттың баяғы "Буға-Ра" Көн хоҙайы бөгөнгө башҡорт һыуҙарында ла, шул боронғо Египеттағылай уҡ, "буға-ра" — *багыра* балыҡ ҡиәфәтендә йөҙә. Башҡорт хәтере әлегәсә шуға бәйле боронғо мәҡәлде һаҡлай: *бирәсе килгән ҡолона — сыгарып ҡуйған йулына* "Би Рә-Әсә килгән ҡуланына//уланына — су//һыу ғарып//ярып ҡойған су-ланына (һуғарыулы баҫыуына)", — яҙғы Ҡояш сағыуланып, ташҡын Нил һыуының баҫыуҙарҙы мул һуғарыуына ишара. "Би-Рә-Әсә" (Көн) тигәндән, әле лә бит беҙ гөнаһһыҙ диуананы: "би-рә-әсә (биресе, биреһе) тотҡан", — тип әйтәбеҙ, уны Көн-Әсә тотоп, изгеләштергән, тимәк. "Биреле" тип ҡыҫҡартыуыбыҙ ҙа шул уҡ мәғәнәлә.

**9. Элә** — "ырғаҡ" тип тә, һәм, был юлы алынғанса, "үлә", "елә" (теге донъяға китә) тип тә уҡылыуы мөмкин.

**10. Бапәнт(ә)** — *бупанда*, йәғни хәҙер "кәфен" тип әйтелмеш аҡ биләүҙә (бинт-урамала) китеү (боронғо фирғәүен мумиялары кеүек). "Бапәнт" һүҙенән, моғайын, *вафат* (үлек) һәм "бәпәнтә"нән — *бәнтә//бәндә* (үлемесле йән) һәм *бәнт//бинт* һүҙҙәре лә шытҡандыр.

**6**

Әйткәндәй, Кесе Азия һарттары беренсе башлап Апеннин ярымутрауын (хәҙерге Италия) һәм шуға яҡын эре утрауҙарҙы (Сардиния, Корсика һ.б.), Лидиянан күсенеп барып, үҙләштергәндәр һәм гүзәл цивилизация төҙөгәндәр; улар аша башҡорттоң боронғо тәүдине, мәҙәниәте уларҙың тирә-яғындағы халыҡтарға ла таралған; һарттарҙың ырын (рун) хәрефтәре нигеҙендә латин һәм грек алфавиттары барлыҡҡа килгән, Европа халыҡтарының күҙе яҙыу таныған. Шуны ла онотмаҫҡа кәрәк: Апеннинға күсенеп барған һарттар үҙҙәрен, тап боронғо Уралдағылай, *тирсендәр* йәки *этрусктар* (Геродот, I, 94, 166) тип тә атағандар, был иһә уларҙың үҙ атамаларын сит тел кешеләре (гректар, латиндар)

боҙобораҡ яҙыу ғәләмәте булып тора. Күрһәтелгән этнонимдарҙың “төп нөсхә”һен һарттар был Кесе Азияға (*Лидияға*) алыҫ төньяҡтағы тәүтөйәктән — боронғо Башҡортостандан алып барған, ә унан — Апеннин ярымутрауына. Күк Уралда барлыҡҡа килмеш *тәүдин* тәғлимәте (ҡарыһүҙе) буйынса, донъялағы ырыу-бүлемәләрҙе (племяларҙы) башлап ебәреүсе тәүге “ҡырҡ ата балалары”ның һәр береһе тәүбаба Имир кәүҙәһенең ҡайһылыр бер ағзаһынан яралған һәм ул ырыу-бүлемә шул ағза исемен алған (“Хәтерхитап”тан ҡарағыҙ). Шуға бәйле, *этер-үсүк — терсәк//терҫәк* (урыҫса *локоть*) тигән һүҙҙән — *этруск* һәм *тирсен* (терҫәк) этнонимдары килеп сыҡҡан да инде; ул этноним кешеләре, *терҫәктәр,* әлегәсә башҡорт халҡының Ҡатай ырыуына ҡарай. Шул уҡ ваҡытта “этерс” йәки “тирҫ” һүҙҙәре башҡорт телендә “төньяҡ” тигәнде лә аңлата (һарт-терҫәктәрҙең *Лидияға* һәм Италияға башҡорт төньяғынан килеүҙәренә ишара). Этнограф Р.Ғ Кузеев билдәләүенсә, “XVI быуатта һәм XVII быуат баштарында башҡорт-*терҫәктәр* Чусовой йылғаһы үрендә йәшәгәндәр, унда *Терҫәк ылыҫы (улусы*) булған... XVII быуат башында *терҫәктәрҙең* күп өлөшө Төмән өйәҙенә ҡаса (Россия империяһының ҡырғын ғәскәрҙәренән ҡотолоу өсөн. — *Й.С.*). Унда ла Әсәт (Исеть) йылғаһына *Терҫәк* йылғаһы ҡойған ерҙә 1630 йылда Бачкур (Башҡорт) ылыҫына (улусуна) күрше *Терҫәк ылыҫы* барлыҡҡа килә... Ҡаҙағстандың Аҡтүбә өлкәһендә лә *Терҫәк-Ҡан* йылғаһы бар”... Автор *терҫәк* башҡорттарының текә һыҙыҡҡа дүрт “имсәк”ләп сыйылмыш ырыу тамғаһын да килтерә, ул иһә боронғо Кесе Азия (*Лидия*) һарттары алфавитының ***йе*** (йелен, һыйыр елене) хәрефе булып тора (ҡарыһүҙҙәге Һыйыр-Инә еленен имеп үҫкән Урал батыр тоҡомдары икәнлектәрен күрһәткес)... *Лидия* һарттарының һәм этруск-тирсендарҙың//тиррендарҙың бер туғанлығын күрһәтеүсе билдәләр боронғо уларҙың ерҙәрендә байтаҡ һаҡланып ҡалған; мәҫәлән, шул ике илдә лә бер үк исемле ҡорам-ҡалалар: һарттарҙағы Торра (Уралдағы изге Тора тау ләҡәбенән) һәм этрусктарҙағы Торреба (Тора-уба), Сард ҡалаһы һәм Сардиния утрауы һ.б. Б.э. тиклем V быуатта Сардиния кешеләре Дельфтәге (Греция) изге ҡорамға үҙҙәренең хоҙайы һаналмыш “Сард-баба” һынын бүләк иткәндәр (тимәк, Дельфтә лә башҡорт-һарттар йәшәгән). Сардиния, Корсика (Наполеон Бонапарттың тыуған төйәге) һәм Ағай (Эгей) диңгеҙе буйҙарының халыҡтары, үҙебеҙҙең боронғо башҡорт-оғуздар һымаҡ уҡ, үҙҙәренең башбабаһы *огузга//үгеҙгә* (Урал батыр ҡиәфәтенә) табынғандар, ә *этруск* батшаларын *сард* тип ләҡәпләгәндәр. Этрусктарҙың да, боронғо башҡорттарҙың да тәүдин хоҙайҙары уртаҡ: *Тин* (башҡ. Атин//Атан йәки Тороҡ) һәм *Уни* (башҡ. Әни йәки Боҡос); Имсәк-хоҙайбикәләр *Турана* (башҡ. Йомай) һәм *Артимита* (башҡ. Һомай). Башҡорт-скиф һынлы сәнғәтендәге кеүек үк, этрусктарҙа ла “яныуар стиле” өҫтөнлөк алған. Мәҫәлән, Ҡортона (ҡорт-ана — бүре-әсә) ҡалаһы урынында табылған бронза шәмдәлдә, А.И. Немировский иҫбатлауынса, “дүрт төркөм йәнлек-яныуар һынландырылған. Беренсеһендә арыҫлан һәм грифон атҡа ташлана, икенсеһендә пантера һәм грифон үгеҙҙе талай, өсөнсөһөндә инә арыҫлан һәм инә пантера боланды ботарлай, ә дүртенсеһендә ҡабан шул икәүҙең ҡорбанына әйләнә”. Шул уҡ ваҡытта “Горгона (башҡ. Ҡырғын, үлтереүсе. — *Й.С.*) һыны артындағы арауыҡта енестәре буйынса төркөмләнмеш 12 йәнлек теҙелгән һәм тағы 40 йән эйәһе

күрһәтелгән", — былары иһә башҡорт ҡарыһүҙендәге башҡорттоң 12 ырыу бабалары һәм донъяның "ҡырҡ ата балалары" булһа кәрәк. Этрусктар илендә лә, Кесе Азиялағы Һарт илендә лә бер үк ҡомартҡы — һыбай һунарсы артында ат янбашында ултырып килеүсе һунар гепарды һүрәттәре табылған. Билдәле булыуынса, "мәңгелек Рим ҡалаһы" ла башҡорт-этрусктарҙың туғандары *башҡорт-пеласгтар* (пеласг — бала-әсәк йәғни бүре-әсә балаһы — *үҫәргәндәр)* тарафынан уларҙың башбабалары Рем (башҡ. Үрем үрсеү хоҙайбикәһе Шүлгән) һәм Ромул (башҡ. Рәмил – Орам-ул йәғни Урал) етәкселегендә нигеҙләнгәнлектән, Рим ҡалаһының боронғо үҙәк майҙанына шул ике башбабаны имеҙеүсе Бүре-әсә һыны бронзанан ҡойоп ҡуйылған; шундай уҡ һындар һүрәтләнешен археологтар Урта Азиялағы боронғо башҡорт ҡалаһы булған *Ҡала-и-Ҡәһҡәһә* (Ҡәһҡәһә — башҡорттоң "Урал батыр" эпосындағы йыландар батшаһы) емеректәренән таптылар. Боронғо этруск һәм римлеләрҙән ҡалған ҡалаларҙың урынлаштырылыштары ла тап башҡорт ҡарыһүҙе ҡанундарына нигеҙләнгән: йәғни, М. Элиаде тикшереп белеүҙәренән күренеүенсә, ундағы ҡалалар ҙа, тап Күк Уралдағы башҡорт Арҡайымылай, Күк менән Ерҙең берешкән тәңгәле — Ер Кендеге итеп һаналған һәм түбәндәгеләрҙе күҙ уңында тотҡан:

1. Ер Кендегендә изге тау (башҡ. Арҡайым тауы) бар, Күк менән Ер шунда тоташа.

Күк көмбәҙен Ер Терәге (изге фаллос) Тора-тау тотоп тора.

2. Һәр изге ҡорам йәки һарай шул Ер Кендегенең символы рәүешендә ҡорола.

Ер Терәге Тора-тауҙың символы рәүешендә манаралар һәм башәнәләр (башнялар) ҡалҡытыла.

3. Изге ҡала йәки изге ҡорам, Ер Кендегенең изге символы булараҡ, Өҫкө Донъяны, Урта Донъяны һәм Аҫҡы Донъяны тоташтыра (үткелек рәүешендә).

Этрусктар (этерҫәктәр – терҫәктәр) йолаһы буйынса, ҡала һалынасаҡ урындың сиктәре аҡ үгеҙ һәм һыйыр егеүле һабан менән "Көн юлы" (сәғәт уҡтары йөрөшө) ыңғайына һөрөп билдәләнер булған (ә ҡапҡалар ҡуйыласаҡ аралар һөрөлмәй ҡалдырылған), аҙаҡ унда тәрән ур-уба өйөлгән, бейек диуар буралған. Үгеҙ һәм һыйыр ҡушарлығы күктәге изге Тин (Тороҡ) һәм Уни (Боҡос) хоҙайҙар ҡауышыуы тип юралған, шуға күрә улар үткәргән ҡала сиге рөхсәтһеҙ һис кем үтә алмаҫлыҡ һәм улар ҡурсалауындағы илаһи кәртә һаналған, ул кәртәне боҙоп уҙыусылар шунда уҡ үлтерелгән. Тап шуға күрә лә, ҡарыһүҙҙә һөйләнеүенсә, Ремды (йәғни Шүлгәнде), йоланы һанға һуҡмайынса Рим ҡалаһының ур-убаһын аша ырғып уҙғаны өсөн, бер туғаны Ромул (йәғни Урал) үлтерә...

Этрусктарҙың ҡала ҡороу йолаһында, тап башҡорт Арҡайымы үҙәгендәге ҡоҙоҡло Аҡатаҡ бинаһындай, ҡала үҙәгенә Урта Донъяны Аҫҡы Донъяға тоташтырыусы соҡор (ҡоҙоҡ) ҡаҙыу ҡаралған, унда һәр йылдың "беренсе ураҡ" уңышы (хәйер-һалымдар) килтерелгән, шулай уҡ бында ситтән күсеп килеүселәр ҙә үҙ тыуған ерҙәренең бер ус тупрағын килтереп һалыр булған (үҙәккә буйһоноу билдәһе). Үҙәк бина (Аҡатаҡ) һәм ҡаланың ябай йорттарының да ир-ат яғы һаналмыш һәм *Атри* (башҡ. *Ата-ир-өй//түр-өй)* тип аталмыш өлөшөнөң

түбәләрендә, тап башҡорт тирмәләрендәгеләй, тындыҡ-тишек ҡалдырылған, ул иһә Ер Кендегенең Өҫкө Донъяға үткелеге һаналған...

Этруск яҙма ҡомартҡыларына килгәндә, бөгөн улар 11 мең дана тип иҫәпләнә, ләкин барыһы ла ысын төрки-этрусктарҙыҡы түгел: ҡайһы берҙәре төрки-этруск теленең, бүтән телдәр тәьҫиренә бирелеп, бик ныҡ үҙгәреүен, йәки тамам йотолоуын күрһәтә. Шулай уҡ этруск алфавитын ҡулланмыш башҡа телдәр эйәләренең яҙыуҙары ла бар унда. Шуға күрә “этруск яҙыуҙары”ның иң әүәлге, үҙ әсә телдәрен онотмаған, осорҙарындағылары ғына бөгөнгө башҡорт-төрки телендә уҡыла. Түбәндә шуларҙың ҡайһы берҙәре бирелә (оригиналдар аҫтында — ошо юлдарҙың авторы башҡарған бөгөнгө башҡортсаһы).

**Ҡәбер таштарындағы латин хәрефле яҙыуҙар (Я.Буриан, Б.Моуховаларҙың “Загадочные этруски”. М. 1970. китабынан). Уларҙы мин хәҙерге башҡорт хәрефтәренә күсерҙем.**

**1. Партунус вел клан**
Бар-тыныс бул, уғлан.
**Велтһурус**
Бултырыш —
**сатлналыҡ рамташ**
Сатылыналыҡ (атаһының исеме), Рамташ (әсәһенең исеме)
**клан ауилс XXIIX лупи**
уғланы, ә-йылы(с) 28-ҙә үлүпү (үлде).

**2. Алетһнас арнтһ**
Әли-тәнәс арынды —
**ларисал зилатһ**
алыр-әзәл зилатты (илатты) —
**тарғналтһи амке**
тарғын-алды (яҙмыш-алды) әмгә (ер ҡарынына).
**3. Каутһас тутһиу**
Кәүҙәһе түтиҙең,
**ауилс lXXX ез**
ә-йылы(с) 80 яҙ (йәш);
**кһимтһм кастһиалтһ**
(х)өмөтөм ҡасты — алды,
**лактһ һеун**
ләхете һыуын(һын).

**4. Тиуза тиус ветусал**
Туйҙа тыйыусы бәт[5]-уҫал (әжәл-уҫал),
**клан тһанас тлеснал**
уғлан-тәнәй төләһен[6]-ал,

[5] Бәтлек — уҫаллыҡ; бәт-уҫал — әжәл.
[6] Төлә (урыҫ. тлен) — мәйет.

**ауилс XIII**
ә-йылы(с) 13.
**5. Лартһ уели арнтһал**
Илар ҙа иле; арынды — ал,
**тетинал клан**
әт-әтине[7]-ал; уғлан (унын улы яҙҙы).

## Дешифровка на основе башкирского языка этрусских надписей приведенных в книге: Классен Е.И. “Новые материалы для древнейшей истории славян вообще и славяно-руссов до-рюриковского времени в особенности с легким очерком истории руссов до Рождества Христова”. Выпуск 1 – 3. С приложением “Описания памятников, объясняющих славяно-русскую историю, составленного Фадеем Воланским и переведенного Е. Классеном”. Москва, 1854, Университетская типография. Репринтное переиздание. СПб. “Андреев и согласие”, 1995.

Тексты читаются срава – налево, этрусские буквы переводятся на кириллицу с разделением сплошного текста на отдельные слова; потом текст переставится на современную читку слева -- направо и читается на основе башкирского языка. Где №10:

[7] Әт-әти — атайҙың атаһы (ҡартатай). Һәм йәнә этруск яҙыуҙарындағы *клан* — уғлан (ул); *зек* (*ҡызыҡ*//*ҡызый* һүҙенән) — ҡыҙ; *ати* — атай; *әмкә* (әнкә) — әсәй; *пуйа* (бейә) — бисә.




слева – направо: справа – налево:

СТЕР КОТС **ОСТОЌ (Ќош) ӘРӘ (Көн-Ќояш) ТӨС-**

ИДА РА **ӘРӘ (Көн-Ќояш) ӘДЕ (нуры)**

------------------------- ------------------------------------------------------------------

СЕСФИ **ӨФӨ-СӘСӘ (Өфө-инә -- Афина)**

№12:

РЕВС/ЛСН/АССС/ЗСЕ/РЕЛФ **ФАЛА-ИР (Бала-ир) ЭШ-ЭЗ СӘССӘ**

**НӘСЕЛ СИБЕР**

Йәғни: бала-ир (ир бала, малай) эш-эҙ сәсһә, нәҫел һибер.

№13:

СР/РИВ/ИР/УРР/РИ/АТМПР **АРПАМТА ИР УРУРУ ӘРИ БИР ЫРЫҪ**

Йәғни: арпамды ир урырлыҡ (итеп), Әрә (Көн-Ќояш), бир ырыҫ.

Ҡәбер таштарындағылар, №29:




ЛА/ИТНСЕРП/ЛВ/АНИТЕТ/ЛВ **ВЛ ТЕТИНА ВЛ ПРЕСЕНТИ АЛ**

Йәғни: Был түтине – был бүресәнде (бөрйәнде) ал.

№35:




НВАСАН/АМАҺ/ **ҺАМА НАСАБЕН**

ЛА/ИФУ/АР **АРА-УФИ АЛ**

Йәғни: Һама (Ҡама) нәсәбен (нәҫелен) Әрә-Өфө (Көн-Өфө) ал.

№36:

ИРУ/РС/СУ/РМИТ/СТ/СУ **УСЫ ТОС ТИМЕР УС СӘР УРИ-**

НАУ **УАН**

Йәғни: Усы тос – тимер ус – сәр (батша)-ирәүән.

№45:

АИҺРАУ/ **УАРҺИА**

ИРЕ/СУҺ/ **ҺУС ЕРИ**

ЕНИ/УАПАС **САПАУ ИНЕ**

Йәғни: Уарһиа Һус(тың) ире Сапау ине.

**Б.э. тиклем VII быуат Ветулони ҡалаһында “Авл Фелуск” торатаашындағы яҙыу (А.И. Немировскийҙың “Этруски. От мифа к истории” китабынан:**

Аҫта яҙылған: **панал ашминимул**

Апанал — ашым-ине-мул

Һулда: **мазксанзреөа... имури һекинаеу**

мәҙәксән-ерҙә,... ғүмере, һек-инәйе (ҡатыны),

Уңда: **аелешфел узкештушнутш**

ғаилә(һе) — шифалы уҙғыш-төшөн(дәй)-үтеш (үтте).



### Туҫтаҡтағы яҙыу:

**Миуел-елпуз-кацри-ҡунумез-иезилу-**

Мәүәле[8] илебеҙ кисере — көнөбөҙ иҙеле,

**Тез-кра-Итил-езпиз-лутез**

Тиҙ керә ител; үҙебеҙ Лотош (туҫтаҡ хужаһының исеме).

Барлыҡ миҫалдарҙан күренеүенсә, боронғо һарт-лидтарҙың һәм этруск-терҫәктәрҙең үҙебеҙҙең башҡорт-төрки телендә һөйләшеүҙәре һәм туп-тура бөгөнгө башҡорттарҙың бабалары икәнлектәре көн кеүек асыҡ.

Авл Фелукска ядкәр

## Резюме

Разбросанные от Урала до Малой Азии сарты (башкирское самоназвание «һарт») являются осколками могущественного в древности башкирского рода Һарт (Сарт), представлявшего из себя одного из двенадцати родов древнебашкирского племенного союза (происхождение этнонима: баш-ғарт — ғарт — һарт — сарт). По «Истории» Геродота широ̆ко известна могущественная страна малоазийских сартов Лидия со столицей Сарт (Сард) на территории современной Турции, где уже в VII — IV веках до н.э. пользовались собственным древнеруническим буквенным письмом и занимались первой в истории человечества чеканкой монет. Вопреки утверждениям многих современных российских и западноевропейских ученых, относивших язык этого этноса иранскому, в последние годы с моей стороны, как мне кажется, убедительно до̆казано, что древние сарты говорили и писали на хорошо понятном даже современным башкирам старобашкирском (то есть тюркском) языке; до̆казательство это достигнуто путем дешифровки (прочитки) однотипных

---

8 Мәүә — ҡыр бесәйе, Көн-Әсәнең ер йөҙөндәге кәүҙәләнеше.

сартских религиозно-нравоучительных надписей, относившихся V веку до н.э. и обнаруженных в разное время разными исследователями в развалинах древней столицы Сард (Турция), в кургане Иссык близ современного города Алматы (Казахстан) и на стеле у озера Асылыкуль (Башкортостан).